“Республикамды данлайым” конкурсы

Республика тарихында минең ғаиләмдең тарихы

(Инша)

Шәйхуллина Элина Эльнар ҡыҙы

Яңауыл ҡалаһы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы

И.Ш.Мөҡсинов исемендәге гимназия ,4-се в класс

Яңауыл муниципаль районының мәғариф бүлеге


Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Һәр бер кеше өсөн ғаилә – тормошта иң ҡәҙерлеһе ул. Һәр бер ғаиләне илебеҙ тарихының бер өлешө тип һанайым. Өләсәйем әйткәнсә, үзендең

ата-олатайҙарыңды , нәҫел ебеңде яҡшы белгәндә генә, тарихты аңлап була. Минең ғаиләм дә ныҡлы нәҫел ағасы үҫтереүселәрҙән. Ғаилә традицияларын, иҫтәлек- хәтирә кеүек байлыҡты быуындан-быуынға тапшырыу - иң изге эштәрҙең береһе. Нәҫелеңде, тыуған-тыумасаңды белмәйенсә, тыуған илеңдең үткәнен, тыуған халҡыңдың тарихын белеп булмай.

Нимә һуң ул ғаилә, ниндәй мәғәнәгә эйә? Ғаилә - үҙе бер бәләкәй дәүләт ул. Ул ҙур дәүләттең нигеҙе булып тора. Ғаилә дәүләттән тыш, дәүләт ғаиләнән башҡа була алмай, шуға күрә улар бер-береһен тулыландыра. Ғаилә ныҡ булһа, дәүләт тә көслө була.

Үткәне юҡтың киләсәге юҡ, ти беҙҙә халыҡ. Ғаилә әле ул атай-әсәй генә түгел, ә һинең нәҫел ебеңдең дауамы ла. Шуға күрә үҙен хөрмәт иткән һәр кеше үҙ ғаиләһенең тарихын белергә һәм киләсәк быуынға ла һөйләп ҡалдырырға тейеш.

Беҙҙең ғаиләнең нигеҙ ташы ул -минең өләсәйем.Уның исеме-Заһирә. Ул Иҫәннбай тигән ауылда йәшәй.Өләсәйем бәләкәй саҡтан уҡ эшкә тотонған.Ун туғыҙ йәшенән алып пенсия йәшенә тиклем колхозда эшләгән. Эшенә бар күңелен һалып эшләгәнен күреп ,уны бик күп Маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләгәндәр.Йәш,сибәр,уңған ҡыҙға күҙ ҙә һалыусылар күп булған.Өләсәйем ҡартатайым Дарвинды мәңгелек юлдашы итеп һайлаған.Татыу ғаиләлә бер-бер артлы өс бала донъяға ауаз һалған.Уларға йән-тән йылыһы биреп үҫтереп, оло юлға сығарғандар. Тик ,ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡартатайым оҙаҡ ауырығандан һуң беҙҙе ташлап китте.

Хәҙер өләсәйем Рифат ағайым менән йәшәй.Әле лә тик тормай:ҡура тултырып мал -тыуар, ҡош-ҡорт аҫрай, ҡышҡы оҙон кистәрҙә ейән-ейәнсәрҙәренә ойоҡбаштар бәйләй.

Ял көндәрендә беҙ уның янында булырға яратабыҙ. Мин шундай тиктормаҫ өләсәйемә ҡарайым да : "Минең әсәйем дә бигерәк уңған,бына кемгә оҡшаған икән ул ,күҙ теймәһен үҙҙәренә," - тип эстән генә уларға һоҡланам.